*Зөһрә АЛТЫНБАЕВА*

# Күңелдә тыуған көйҙәр


Айһылыу Сәлмәнова

*...Минең йөрәк баксамда икһеҙ-сикһеҙ мөхәббәт сәскәләре үҫә.*

*Һәр сәскә йөрәк түрендә тыуа һәм артабан моңға әүерелә, үҙенең һис кенә лә ҡабатланмаҫ формаһын алып, эскерһеҙлек һәм мөхәббәт хистәре менән тулыша. Көй йөрәк тибешенә яраҡлашып тибә башлай һәм барса тирә-йүнде, һинең бар булмышыңды солғап ала, кәүҙәң-тәнеңдең һәр күҙәнәген мөхәббәткә күмә.*

*Минең күңел сәскәләремдең матурлығы хаҡында иң элек минең көйҙәремде тыңлаусылар әйтергә тейеш. Шуға күрә мин уларға: «Көй-моң менән бергә булығыҙ, уның менән тын алығыҙ, мөхәббәттән яҙмағыҙ, мөхәббәт менән ҡалығыҙ», — тип өндәшәм...*

Юбилей концертына әҙерләнгән программаһында үҙенсәлекле композитор Айһылыу Сәлмәнова тыңлаусыларға үҙенең эскерһеҙ теләктәрен ошо юлдар аша еткерҙе.

Айһылыу Рафиҡ ҡыҙы Сәлмәнова донъяға тыуған көнөнән алып тиерлек моңдар илендә йәшәй. Атаһы, билдәле композитор Рафиҡ Сәлмәновтарҙың йортонда моң иртәнән кискә тиклем яңғырай. Әле уҡый-яҙа белмәгән сағында уҡ Айһылыу, атаһына эйәреп, ноталар яҙырға ынтыла. Атаһы һыҙып биргән нота станына бер-бер артлы нотаға оҡшаш һүрәттәр төшөрә. Айһылыу өсөн улар нота түгел — сәскәләр, күбәләктәр. Әйтерһең дә, аллы-гөллө сәскәләргә ҡунып күбәләктәр моң йыя.

«Атанан күргән уҡ юнған» тигән әйтемдең хаҡлығын Айһылыуҙың ижады раҫлай ҙа инде. Музыкаль образдар менән уйлай белеү һәләте бәләкәй сағынан уратып алған мөхиттән, тәбиғәттән, атаһынан күскәндер, моғайын. Айһылыу ҙа, ағаһы Салауат та йыр-моң илен үҙ итә һәм артабан икеһе лә танылған композитор, Башҡортостан Композиторҙар союзы ағзалары булып китә.

Айһылыу музыка менән бик иртә ҡыҙыҡһына башлай. Тәүҙә Н.Сабитов исемендәге музыка мәктәбендә белем ала. Унан Өфө сәнғәт училищеһына уҡырға инә. Композиция буйынса тәүге дәрестәрҙе композитор Морат Әхмәтовтан ала. Ә ижади эш менән шөғөлләнеү теләге бәләкәй сағынан килә. Тәүҙә шиғырҙар яҙа, мәктәптә яҙған иншалары ла күп осраҡта рифмаға ҡоролоуы менән айырыла. Мәктәпте тамамлағас, икеләнгән мәлдәре лә була: филология факультетына уҡырға барырғамы, әллә моң иленә юл тоторғамы? Нисек кенә булмаһын, күңелен арбап өлгөргән моң донъяһы үҙенә тарта, Айһылыу Ҡорманғази исемендәге Алматы дәүләт консерваторияһына, композиция бүлегенә уҡырға инә.

Тәүге әҫәрҙәрен дә консерваторияла уҡығанда ижад итә Айһылыу: яратҡан шағирҙары Фредерик Гарсиа Лорка, Ҡадир Даян шиғырҙарына яҙылған романстарын тыңлаусылар ихлас ҡабул итә. Диплом эше итеп симфоник оркестр өсөн дүрт өлөштән торған симфония-концерт яҙа.

Консерваторияны тамамлап ҡайтҡас, Айһылыу Рафиҡ ҡыҙы балалар музыка мәктәбендә композиция буйынса дәрестәр бирә, педагогик эшмәкәрлеге менән бер рәттән композитор булараҡ та танылыу яулай. Әлеге ваҡытта ул Өфө ҡалаһының 136-сы башҡорт лицейында музыка-эстетика кафедраһын етәкләй, шулай уҡ лицейҙа музыкаль белем биреү буйынса директор урынбаҫары. Ныҡышмал, тырыш, уңышлы ижад итеүсе композитор уҡыусыларының музыкаль белемгә эйә булыуҙарына тос өлөш индерә. Айһылыу Рафиҡ ҡыҙы музыка синыфтарында төп фән — сольфеджионан уҡыта, фортепианола уйнарға өйрәнеүселәр менән шөғөлләнә. Лицейҙың музыка синыфтарында уҡыусы балалар урта музыка мәктәбе программаһын да үҙләштерә. Бәлки, тап улар араһынан киләсәктә талантлы музыканттар, композиторҙар үҫеп сығыр.

Әлбиттә, мәктәптә уҡытыу менән бергә композиторлыҡ эше менән шөғөлләнеү еңелдән түгел. Композитор һөнәре үҙе үк ауыр һәм һирәк кешегә бирелә торған һәләт. Беҙ йыш ҡына талантлы композиторҙар аҙ булыуға зарланабыҙ. Ә улар араһында ҡатын-ҡыҙ композиторҙар бармаҡ менән генә һанарлыҡ, ҙур күләмле симфоник әҫәрҙәр ижад итеүсе ҡатын-ҡыҙҙар бер-ике генәлер.

Айһылыу Сәлмәнова был өлкәлә уңышлы эшләүсе ҡатын-ҡыҙ композитор булыуы менән ҡыуандыра. Өс тиҫтәгә яҡын ижад ғүмерендә ул оркестр һәм бас өсөн «Ер яралары» симфоник поэмаһын, «Рәми» вокаль-симфоник поэмаһын, ҡыллы квартет өсөн «Һинһеҙ тормош» поэмаһын, бас, флейта һәм һуҡма музыка ҡоралдары өсөн «Аң сығанаҡтары буйлап» вокаль циклын, «Арҡайым» вокаль симфонияһын ижад иткән.

1989 йылда ҡурай, летава һәм ҡыллы оркестр өсөн яҙылған «Ҡурай тураһында поэма» иһә киң ҡатлам музыка һөйөүселәрҙең күңел түрендә урын алды. Талантлы ҡурайсы Роберт Юлдашев башҡарыуында әҫәр күп тапҡыр тамашасылар хөкөмөнә сығарылып, ихлас ҡабул ителде. «Ҡурай тураһында поэма» музыкаль мәктәптәр программаһына өйрәнеү өсөн индерелгән.

Һәр композитор үҙенең ижадында заман ҡуйған һорауҙарға яуап эҙләй, халҡыбыҙҙың үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге хаҡында уйлана. Айһылыу Сәлмәнова ла тап шундай эҙләнеүсән, тәрән фәлсәфәүи фекерләү ҡеүәһенә эйә булған композиторҙарҙың береһе. Уның «Аҡбуҙат» эпосына таянып ижад иткән «Шүлгән күл» әҫәре, «Арҡайым» симфонияһы быны асыҡ раҫлай.

Әйткәндәй, «Арҡайым» симфонияһын Айһылыу Рафиҡ ҡыҙы ошо серле төбәккә барып ҡайтҡас яҙа. Дөрөҫөрәге, көй тап ошо ерҙә булғанда ҡолағында яңғырап тора, хатта 1-се, 2-се, 3-сө өлөшө үҙе бер моң булып һынлана. Композитор быны изге ерҙең илаһи көсөнөң тәьҫире тип иҫәпләй.

— Композитор булыу еңелдән түгел, — ти Айһылыу Рафиҡ ҡыҙы. — Ижад кешеләренең тормошондағы иң сағыу бейеклектәр генә асыҡ күренә, ә ошо бейеклеккә илткән һуҡмаҡ, унда осраған ҡыйынлыҡтар, һикәлтәләр күҙгә сағылып бармай һәм ул шулай булырға тейеш тә. Композиторҙың теге йәки был көйөн тыңлаусы был аһәңле әҫәрҙе яҙғанда уның күпме көс түккәнен, күпме ғазап сиккәнен белергә тейеш түгел.

Айһылыу Сәлмәнованың гөрләп килгән яҙ айҙарында уҙған һәм ижад емештәренә үҙенсәлекле йомғаҡ булып торған «Был мөхәббәт иле...» тип аталған концертында күңелдәргә хуш килгән байтаҡ әҫәрҙәр яңғыра-

ны. «Шишмә янында» һәм «Яңырыу» симфоник медитациялары, өс өлөштән торған «Арҡайым» симфонияһы музыка һөйөүселәргә заман кешеһенең тәрән кисерештәре менән таныштырҙы. Бар донъя мөхәббәттән туҡылған, мөхәббәт кешене күктәргә күтәрә, батырлыҡҡа әйҙәй, тормошто байыта, сағыу итә; кешегә, тормошҡа мөхәббәт, матур маҡсаттарға ынтыла белеү — үҙе бер талант. Концерттың икенсе өлөшөндә Людмила Хәбибрахманова шиғырҙарына хор, солист һәм симфоник оркестр өсөн яҙылған «Был мөхәббәт иле» ораторияһы ошо бөйөк хискә мәҙхиә булып яңғыраны.

Айһылыу Сәлмәнова — эҙләнеүсән ижадсы. Уның әҫәрҙәре ошо хаҡта асыҡ һөйләй. Шағир Рауил Бикбаев шиғырҙарына сопрано һәм ҡыллы квартет өсөн «Һинһеҙ тормош» поэмаһы (1997), Людмила Хәбибрахманова шиғырҙарына бас, флейта, альт һәм ҡыллы инструменттар өсөн әҫәрҙәр циклы (2000) шуға дәлил. Был әҫәрҙәр төрлө концерттарҙа йыш яңғырай һәм лайыҡлы баһа ала. Композиторҙың Гарсиа Лорка, Федор Тютчев, Ҡадир Даян шиғырҙарына яҙған романстары һәм йырҙары, Шамил Анаҡ шиғырҙарына «Ер яралары» (әйткәндәй, был әҫәр Бөйөк Еңеүҙең 40 йыллығына арнап яҙылған) һәм Рәми Ғарипов шиғырҙарына «Рәми» вокаль-симфоник поэмалары Башҡортостан телевидениеһы һәм радиоһының алтын фондына ингән.

Айһылыу Сәлмәнова үҙ ижадында фольклор сығанаҡтарына ла йыш мөрәжәғәт итә, башҡорт халҡының моң мираҫын яңыса яңғыратырға ынтылыуы менән айырылып тора. Ул ижад иткән ҡурай һәм фортепиано өсөн вариациялар һәм ике соната күп йылдар инде республикабыҙҙың юғары уҡыу йорттары һәм музыка училищелары студенттарын уҡытыу программаһына индерелгән, улар республика, Рәсәй күләмендә уҙғарылған төрлө бәйгеләрҙә башҡарыла һәм призлы урындар яулай. 2003 йылда Элиста ҡалаһында яуланған Гран-при һәм республикабыҙҙа уҙған конкурстарҙа 1-се, 2-се урындар яуланыуы шуны раҫлай. Композиторҙың балалар өсөн яҙған әҫәрҙәре уның ижадында ҙур урын алып тора. Фортепиано, скрипка, баян, аккордеон өсөн пьесаларын, башҡорт шағирҙарының шиғырҙарына яҙылған йырҙарын, Сәрүәр Суринаның балалар өсөн әкиәттәренә ижад ителгән көйҙәрен балалар музыка мәктәптәрендә уҡыусылар йыш башҡара.

Йылдар уҙған һайын байый барған ижад емештәре композитор ижадының йоғонтоло көскә, сағыу буяуҙарға бай булыуын күрһәтә. Башҡортостандың музыка сәнғәтендә лайыҡлы урын тапҡан әҫәрҙәре концерттарҙа, Башҡортостан Республикаһы Композиторҙар союзы пленумдарында, Саранск, Ҡазан, Йошкар-Ола ҡалаларында уҙған Волга буйы һәм Урал композиторҙары фестивалдәрендә йыш яңғырай. Үҙенсәлекле ижады менән Айһылыу Сәлмәнова башҡорт профессиональ сәнғәте үҫешенә тос өлөш индерә.

Быйыл танылған композитор үҙенең 50 йәшлек юбилейын билдәләне. Ижад кешеһе өсөн был осор ижады сәскә атҡан мәл генә. Алда әле өр-яңы асыштар, табыштар, симфониялар, ораториялар көтә. Шуға ла үҙен бәхетле тип иҫәпләй Айһылыу Рафиҡ ҡыҙы: яратҡан эше, тыңлаусыларына ҡыуаныс килтергән ижад емештәре бар. Киләсәктә үҙенә терәк булырлыҡ улы Айбулат һәм ҡыҙы Зифа үҫеп килә. Һөйкөмлө ҡатын-ҡыҙ, изге күңелле әсә, һәләтле композитор ул Айһылыу Сәлмәнова.